УДК 070
DOI: 10.33184/dktnpin-2022-04-08.7

***Әхмәтйәнова Н.Ә.,*** *ф.ф.к., БДУ доценты, Өфө ҡ.*

## 112-СЕ БАШҠОРТ КАВАЛЕРИЯ ДИВИЗИЯҺЫНЫҢ «ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР» ФРОНТ ГАЗЕТАҺЫНДА ӘҘӘБИ ЖАНРҘАР

***Аннотация.*** *В данной статье рассматриваются проблемы формирования информационной политики в годы Великой Отечественной войны на примере фронтовой газеты «Красные конники» 112-й Башкирской кавалерийской дивизии. На фоне перехода к военным условиям перед СМИ страны встала сложнейшая задача - сохранение боевого духа и формирование личности воина через литературные жанры и их формы. Автор приходит к выводам о том, что исследуемая газета справлялась с данными задачами.*

***Ключевые слова:*** *фронтовая печать, дивизионные газеты, башкирская кавалерийская дивизия, литературные жанры*

## LITERARY GENRES IN THE NEWSPAPER "RED HORSEMEN" OF THE 112TH BASHKIR CAVALRY DIVISION

***Summary*** *This article discusses the problems of information policy formation during the Great Patriotic War on the example of the front-line newspaper "Red Horsemen" of the 112th Bashkir Cavalry Division. Against the background of the transition to military conditions, the country's media faced the most difficult task - the preservation of the fighting spirit and the formation of the warrior's personality through literary genres and their forms. The author comes to the conclusion that the newspaper under study coped with these tasks.*

***Keywords****: frontline press, divisional newspapers, Bashkir cavalry division, literary genres*

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының «Ҡыҙыл атлылар» гәзите ярҙамында совет власы Ватанды һаҡлаусылар менән туранан тура әңгәмәләшеү алып барған. Баҫмалағы документтар һалдаттарҙы яу ҡырындағы яңылыҡтар, үҙгәрештәр менән таныштырып, дөрөҫ мәғлүмәттәр еткереп кенә тормаған, ә һәр яугирҙы рухландырған, ҡаты яуҙа еңеп сығыу теләктәрен көсәйткән [6, 447 б.]. «Ҡыҙыл атлылар» гәзите йөкмәткеһе үҙенең төрлөлөгө менән үҙенә йәлеп итә.

Был мәҡәлә сиктәрендә гәзит биттәрендә сағылдырылған әҙәбиәт темаһына ентекләп туҡталайыҡ. Фронт баҫмаһын тикшереү гәзит биттәрендә йыш ҡына әҙәби материалдар ҙа баҫылғанлығын күрһәтте. Архивтарҙа һаҡланып ҡалған документтарға таянып эш итеү нигеҙендә 1942 йылдың – һигеҙ, 1943 йылдың ун һанында әҙәбиәт өлгөләре табылып, һәр һанда баҫылғандыр, тигән гипотезаға этәрҙе. Совет байрамдары көндәрендә махсус әҙәби биттәр сығарылған. Материалдарҙың жанр үҙенсәлектәренән сығып

анализлау ошондай һығымталарға килтерҙе:ете шиғыр,биш хикәйә,дүрт йыр - таҡмаҡ, бер очерк. Бөтә әҫәрҙәр ҙә үҙ жанр ҡанундарынан ситләшкән, ҡыҫҡа күләмле. Был, беренсенән, «Ҡыҙыл атлылар»ҙың А4 форматында 2 биттә генә һәм көн аша баҫылыуы; икенсенән, фронт шарттарында хәрби хикәйәләрҙең, очерктарҙың гәзиткә махсус тәғәйенләнеп, тиҙ ҡулға яҙылыуы менән аңлатыла. Авторҙар араһында ул заманға билдәле яҙыусылар, кавалерия дивизияһы ҡыҙылармеецтарының, йәш башҡорт әҙиптәренең ижад емештәре бар. Быларҙан тыш, һәр һанда тиерлек төрлө әҙиптәрҙең шиғыр юлдарынан рухландырғыс афоризмдар бирелгән. Мәҫәлән:

Данһыҙ, маҡтауһыҙ ерҙә йәшәмәм мин,
Дауыллы көс булып дошманға ташланам мин. (Фирдәүси) [1].

1942 йылдың һаҡланып ҡалған һандарында яугир А. Гималетдиновтың «Башҡорт егеттәренә» (№34, 2 июнь), «Ҡыҙыл атлылар» гәзитенең яуаплы сәркәтибе Ә. Ихсандың «Иркәмә» (№36,12 июнь), М. Әхмәдиевтың «Даһи өсөн!» (№ 39,14 июнь) шиғырҙары; 1943 йылда гвардия өлкән лейтенанты В. Хәмидуллиндың «Часть даны» (№ 186, 25 июль), “Винтовка” (№ 137, 8 апрель) шиғырҙарын табырға була. Шул йылдың 1 майында нәшер ителгән 148-се һанында байрам уңайынан бер бит махсус әҙәби бит бирелә, унда гвардия өлкән лейтенанты В. Хәмидуллиндың «Май менән», ҡыҙылармеецтар А. Сафуановтың «Орден таҡҡанда», Ю. Кәлимуллиндың «Ҡыҙыл Армияға», йәш шағир Ҡадир Даяндың «Әсәләрҙең теләге» исемле патриотик рух, Ватанға ҡарата һөйөү, фашистарға ҡаршы нәфрәт тойғоһо менән һуғарылған шиғырҙары баҫыла. Ә. Ихсан “Иркәмә” шиғыры К. Симоновтың “Жди меня/Көт мине” шиғырына ауаздаш:

«…Уй баҫмаһын күркәм битеңде
Тик көт мине иркәм,
Мин ҡайтырмын
Ҡояш көлөп торған бер көндө… »
«….Ҡош тауышын тыңла таң менән
Шул саҡта ла иркәм, көт һин мине… »

«Ҡыҙыл атлылар» мөхәрриәте яугирҙәрҙең күңел асыу мәсьәләһен дә күҙ уңынан ысҡындырмағандар, шуға күрә гәзиттә башҡорт халыҡ ижадына һәм уға нигеҙләнеп ижад ителгән әҫәрҙәргә мөрәжәғәт итеү йыш күренеш булған [9,264 б.]. Ҡайһы саҡта баҫмала таҡмаҡ һәм йырҙар баҫылған.

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Күрҙем осҡан ҡырҡаҙын.
– Бер аҙым да сигенмәҫкә! –
Ватаныбыҙ приказы.

Йырҙарҙың ҡайһыларының һуғыштан һуңғы йылдарҙа халыҡ араһында таралып, яратып йырланғанлығын әле лә хәтерләйҙәр.

Атланып толпар аттарға
Урал тауҙары буйлап,
Киттек Ватанды яҡларға
Толпарҙар бара уйнап.

Б. Бикбайҙың «Йырҙар» (1942 йыл , №38, 12 июнь), «Бүләк тураһында йырҙар» исемле бер рубрика аҫтында гвардия өлкән лейтенанты Вәсим

Хамидуллиндың 4 шиғыры (1942 йыл, №66, 24 август), авторы медалле С. Гәрәев тип бирелгән «Йырҙар» (1942 йыл , №74, 10 сентябрь) гвардия ҡыҙылармеецы Ғәни Сырбаевтың «Йырлағыҙ йыр!» (1943 йыл, №142, 18 апрель) әҫәрҙәре позитив нотала яҙылған; алдағы тормошта көтәсәк яҡтылыҡ, яҡшылыҡ, бөтмәҫ шатлыҡ тойғоһо менән һуғарылған; Ватан һаҡлаусылар араһында «паникер менән ҡурҡаҡтарға урын юҡ» тигән идеяны йөкләй [3;4].

Әҙәбиәттең прозаик жанрынан хикәйәләр осраштыра «Ҡыҙыл атлылар» гәзитендә. 1942 йылда йышыраҡ гәзит мөхәррире Али Карнайҙың әҫәрҙәре баҫыла, ул Х. Мансуров псевдонимын ҡуллана [5, 76 б.]. Уның «Дуҫлыҡ» (1942 йыл, №37, 16 июнь), «Нисә фрицте үлтерҙең?» (1942 йыл, № 55, 2 август), «Һүнмәҫ йондоҙ» (1943 йыл, №7,14 ғинуар), «Урал» (1943 йыл, №145-146, 24, 26 апрель) хикәйәләренең күләме ҙурайғандан ҙурая барып, һуңғыһы ике һанда донъя күрә.

А. Карнайҙың «Нисә фрицте үлтерҙең?» исемле хикәйәһенең геройы, икенсе эшелонда, йәғни фронт һыҙығынан арттараҡ хеҙмәт итеүсе һалдат Уралдан, ҡатынынан хат алған. Ә унда шундай һүҙҙәр бар: «Нисә фрицте үлтерҙең? Шуны айырып яҙ. Балалар ҙа ҡыҙыҡһыналар, һинең батырлығыңды белеп, беҙ шатланырбыҙ, ғорурланырбыҙ...» Ошо хат һалдаттың тыныслығын юғалта. Ул военкомға барып үҙен тиҙерәк алғы һыҙыҡҡа ебәреүҙәрен үтенә. Уның бында ла мөһим эш эшләүе, барыбер фронтта булыуы тураһында һөйләүҙәренә ҡаршы: «Шулай ҙа, әгәр бер нисә фрицте үҙ ҡулым менән дөмөктөрмәһәм, нисек итеп мин Ватан һуғышында ҡатнаштым, тип һөйләрмен?» – ти ул. Был әҫәрҙә ғәзиз кешеһенән килгән хаттың яугиргә көслө тәьҫир итеүе күренә.

А. Карнайҙың «Һүнмәҫ йондоҙ» исемле сағыштырмаса күләмле хикәйәһе фашистәрҙың кешелекһеҙлектәрен фаш итеүсе күренештәр менән башлана: гитлерсылар фронттың аръяғында ҡалған ауылды торонбашҡа әйләндергәндәр, ҡулдарына эләккән өс ҡыҙылармеецты бер йортҡа бикләп тереләй яндырғандар, ауыл халҡын теләгәнсә мыҫҡыл иткәндәр. Яҙыусы ошондай шарттарҙа ла совет кешеләрендә еңеүгә ышаныстың һүрелмәүен күрһәтеүсе деталь килтерә – ҡыҙыл йондоҙ. Ҡыҙылармеецтәр һәләк булыр алдынан үҙҙәренең ике йондоҙҙарын ауылдың бер әбейенә биреп ҡалдырғандар. Әбей уларҙы һаҡлаған һәм эскадрон фашистарҙы эҙәрлекләп ауылға килеп инеү менән шул йондоҙҙарҙы тотоп ҡаршы сыға. Бәләкәй генә совет йондоҙо әбейҙең өмөтөн сағылдырһа, яугирҙәрҙең был йондоҙҙарҙы һәләк булған совет һалдаттарының васыяты итеп ҡабул итәләр, һәм уларҙа үс алыу тойғоһо тағы ла нығыраҡ тоҡанғандыр.

«Дуҫлыҡ», «Урал» хикәйәләрендә автор йәш кенә башҡорт егеттәренең тыуған Уралына, Ағиҙел, Һаҡмар буйҙарында ҡалған туғандарына ҡарата кисергән һөйөү һәм һағыныу хистәренең дошманға нәфрәт менән үрелеп үҫеүен; яраларҙан ҡанһырап яу яланында ятҡанда ла ат йәнле булып ҡалғанлығын, аттарының яугирҙәргә – үҙҙәре менән бер ауылдан һуғышҡа алынған хужаларына тоғролоғон тетрәндергес итеп һүрәтләй. Шулай А. Карнай геройҙарының рухи һәм физик көсөн, күрһәткән батырлығын, кешелек һыҙаттарының иң яҡшыһын ғына сағылдырған һәм үҙе лә күҙ алдына килтерә алмаған йыраҡ киләсәккә, улар яулаған тыныс тормошта көн иткән милләттәштәренә тир һәм ҡан менән һуғарылған гәзит биттәре аша васыятын еткерә алған.

1943 йылда «Ҡыҙыл атлылар» гәзите биттәрендә Әхнәф Кирәй (Кирәй Мәргән) хикәйәләре лә күренә башлай. Бөйөк Ватан һуғышының тәүге

йылында К. Мәргән «Комсомольская правда» газетаһының Башҡортостан буйынса хәбәрсеһе итеп билдәләнә, коммунистар партияһы сафына алына.

1942 йылдың көҙөндә Ҡыҙыл Армияның баш политуправлениеһы аша Башҡорт кавалерия дивизияһына ете айға командировкаға ебәрелә [5, 80 б.]. Дивизия гәзитендә «Мыйыҡ» (1943 йыл №141,16 апрель), «Сос егет» (1943 йыл, №137, 8 апрель) хикәйәләре донъя күрә. Уның дивизияның яу ҡырындағы батырлыҡтары тураһында «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә мәҡәләләр циклы баҫыла, унан «Башҡорттар» (1943), «Егеттәр» (1944), «Һуғыш фольклоры» (1944) исемле китаптарын нәшер итә.

Кирәй Мәргәндең «Мыйыҡ» әҫәре «Блиндажда ишетелгән хикәйә» тигән рубрикала бирелә. Ике дуҫ боец Бикбулатов менән Ишбулатов бер районадан, бер колхоздан, икеһе лә йәш, ыҫпайҙар. Һуғышҡа килгәс, икеһе лә олоғайып китә һәм бер мәлде мыйыҡ ебәрәләр. Шулай бер саҡ блиндажда ултырғанда Ишбулатов иптәшенең мыйығына ҡарап тороп: «Шул мыйығыңдың бер бөртөгө өсөн күпме һорайһың? » - тип һорап ҡуя. Иптәше: «Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтарҙың береһен, бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың», - тип яуап бирә.Тәүге көндә үк улар берәр фрицте юҡ итәләр, икенсе көнө береһе – биш, икенсеһе ете немец һалдатын үлтерәләр. Шулай итеп, уларҙың ярышы башланып китә. Һан көн һайын арта барҙы, ә мыйыҡтар икеһенең дә һирәгәйә килде. Уларҙың мыйыҡтары тамам һирәгәйеп, йәмһеҙләнә башлағас, бөтөнләй ҡырып ташларға мәжбүр булдылар». [4].

К. Мәргәндең «Сос егет» хикәйәһе киҫкен,текә сюжетлы ваҡиғаларҙы һәлмәк кенә, шул уҡ ваҡытта, ниндәйһер олпатлыҡ, юмор аша һүрәтләй. «Һис бер нигә аптырап тормаҫ, ниндәй генә ҡыйын һәм ҡатмарлы хәлгә ҡалмаһын, һис юғалмай, йылт итеп килеп сыҡҡан штаб связь офицеры Алмакаевтың» сослоҡтарын халыҡ әкиәте рәүешендә бәйән итеүгә ҡоролғанлығы дивизияның яугирҙарын халыҡ ижады батырҙарына тиң итә. «Ауыл ситендә торалар, ти былар, аҙыраҡ йөрөп алған булалар, ти – йәнәһе, патрульдәр инде, значит.»; йәки: «Аттарын атланып алалар, рәхәтләнеп дошман тылын айҡап йөрөйҙәр-йөрөйҙәр ҙә, бик күп кәрәкле мәғлүмәттәр алып, иҫән-һау үҙебеҙҙең “Оло йортҡа”килеп инәләр.» [4].

Тағы ла әҙәби материалдарҙың авторҙары араһында ижадсы яугирҙәр ҙә бар: гв. лейтенанты М. Халиковтың «Нарынбаев хәйләһе» (1943 йыл,№148,1 май) хикәйәһегәзит биттәрендә күп урынды алған дивизия атлыларының батырлыҡтары темаһын дауам итә. Хикәйә геройы Миннислам Нарынбаевтың дошман автоматсыларына яңғыҙ ҡаршы тороп, уларҙы юҡ итеүе хаҡында һүҙ бара. «Ул – аҡыллы һәм батыр егет. Бөтөнләй тип әйтерлек янып бөткән, ләкин немецтар яғында стенаһы һәм тәҙрә тишектәре тороп ҡалған өй артына йәшеренгән һәм шунан төтөн аша үрелеп ҡарап, автоматтан очередь бирә. Уның батырлығы башҡа боецтарға дәрт бирә. Дошман рубежды үтә алмай» [4].

Прозаик әҫәрҙәр араһында әҙәбиәт сигендәге публицистик жанр өлгөләре лә осрай. Ул – очерк. 1942 йылдың 57-59-сы һандарында «Красная Звезда» гәзитенең махсус хәбәрсеһенән рубрикаһы аҫтында К.Симоновтың “Башҡорт дивизияһында” очеркы башҡорт теленә тәржемәләп баҫыла. Унан һуң шул уҡ 1942 йылда Үҙәк хәрби баҫмаларында И.Эренбургтың «Башҡорттар», ағалы-энеле

Турҙарҙың «Тризна» очерктарының донъя күреүе башҡорт ғалимы Р.Н. Байымов билдәләүенсә, «бөйөк рус халҡының кескәй генә милләттәргә эскерһеҙ туғандашлыҡ мөнәсәбәтен дәлилләп торһа, икенсе яҡтан, күренекле рус һүҙ оҫталарының ижади үрнәге башҡорт яҙыусыларына хәрби тематиканы художестволы үҙләштереү йүнәлешендә бурысты еңеләйтә төштө, юл күрһәтте»[7, 206 б.].

Шулай итеп, Башҡорт кавалерия дивизияһының «Ҡыҙыл атлылар» гәзитендә төрлө жанрҙар ҡулланылған. Ҡыҫҡа мәҡәләләр, репортаждар, иғландар, документтар, хаттар менән бер рәттән әҙәби әҫәрҙәргә лә урын табылыуы, хәбәрселәр һәм һалдаттарҙың да ижадын күтәрмәләп тороуы – барыһы ла һуғыш йылдарында ҙур мәғәнәгә эйә булған [8, 147 б.]. Улар ҡыҙылармеецтарҙа сәм уятҡан, үс-нәфрәттәрен арттырған, рух ныҡлығын көсәйткән һәм, әлбиттә, еңеүҙе, тимәк алыҫта ҡалған туғандар менән күрешеү көнөн яҡынайтҡан. Шул рәүешле, әҙәбиәт һуғыш мәлендә лә үҙенең тәрбиәүи, агитацион ролен үтәүҙән туҡтамаған.

## ӘҘӘБИӘТ:


1. РМБС. Документальный фонд. ОФ. Документальный фонд. НВ. Ед. хр. 693.
2. РМБС. Документальный фонд. ОФ. Ед. хр. 2406.
3. Подшивка газет «Ҡыҙыл атлылар» за 1942 год // РМБС. Документальный фонд. ОФ. Ед. хр. 2066. Л. 1-24.
4. Подшивка газетных публикаций в газете «Ҡыҙыл атлылар» за 1942-1943 год // РМБС. Документальный фонд. НВ. Ед. хр. 768.
5. Ахметьянова Н. А. Ишмуллина Л. Р. Печать Великой Отечественной войны:газета “Ҡызыл атлылар” 112-й Башкирской кавалерийской дивизии . – Уфа: РИЦ БашГУ, 2019. – 92 с.
6. Ахметьянова Н. А. Роль газеты «Красные конники» в воспитании личности воина в годы войны // Роль личности в историко-культурном пространстве (к 260-летию национального героя башкирского народа, поэта импровизатора Салавата Юлаева). – Уфа, 2014. – С. 442-448.
7. Байымов Р. Бөйөк Ватан һуғышы осоро әҙәбиәте//XX быуат башҡорт әҙәбиәте.-Уфа, 2003.- 576 б.
8. Ишмуллина Л.Р, Әхмәтйәнова Н.Ә. Башҡорт кавалерия дивизияһының «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының һалдаттар тормошонда роле // Актуальные проблемы современной татарской филологии. – Уфа, 2016. – С. 143-147
9. Әхмәтйәнова Н.Ә. Матбуғатта милли рух һәм әхлаҡ концепцияһы сағылышы//Медиапространство Российской Федерации: глобальный и национальный аспекты Материалы Всероссийской (с международным участием) научно-практической конференции, посвященной 100-летию башкирской национальной печати. – Уфа, 2017. – С. 258-265.


© Әхмәтйәнова Н.Ә., 2022